*Салауат РӘХМӘТУЛЛА*

# *Илемдә — олтан мин*



*Салауат Рәхмәтулла (Салауат Ибраһим улы Рәхмәтуллин) 1942 йылда Ауырғазы районының Солтанморат ауылында тыуған. Стәрлетамаҡ педагогия институтында юғары белем ала һәм Төрөмбәт урта мәктәбенә уҡыу-уҡытыу бүлеге мөдире булып эшләй.*

*Армиянан ҡайтҡас, Ишембай районы Петровский балалар йортонда директор урынбаҫары, тыуған ауылында урыҫ теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы, Ғафури районының Аккүл ауылы мәҙәниәт йорто директоры була.*

*1984 йылда Стәрлетамаҡҡа күсеп килә: педагогия институтында, интернат-мәктәптә, Ю.Гагарин исемендәге ял паркында, әле «Ашҡаҙар» гәзитендә эшләй.*

*Шағирҙың башҡорт һәм татар телдәрендә һигеҙ китабы донъя күрҙе.*

*1993 йылдан — Башҡортостан Яҙыусылар союзы ағзаһы. Хәким Ғиләжев исемендәге премия лауреаты.*

### ***Яңы быуатҡа бер һүҙ***

Егерменсе йөҙ, хуш!
Яңы быуат!
Һиндә хәҙер хыял-өмөттәр:
Тыуыр таңдар һиндә алтын кеүек,
Тыуыр көндәр көмөш кеүектәр...

Бәхет алып кил һин!
Хәсрәттәрҙән
Ҡалайыҡсы инде бушанып.
(Быуат буйы
Шулай йәшәнек беҙ
Һәр бер тыуыр йылға ышанып...)

Һин алып кил беҙгә бәхет-шатлыҡ!
Һиндә — һуңғы хыял-өмөттәр:
Аҡыл һатҡан батшалар ҙа
Һиндә
Даһи булып китер кеүектәр...

Өмөттәрҙе аҡла, яңы быуат!
Һин күрһәт бер шәфҡәт, бер рәхим! —
Халҡым менән
Һиңә кереп киләм:
— Бисмиллаһир-рахманир-рәхим!..

* * *

*Сит илдә солтан булғансы,*
*үҙ илеңдә олтан бул...*
*Мәҡәл*

Илемдә — олтан мин...
Бик күп
Илдәрҙә йөрөп ҡайттым.
Ситтә — ситен:
Әллә ниҙәр
Ситтәрҙә күреп ҡайттым.

Осоп ҡайттым!
Һағынып ҡайттым!
Күңелдәр тулып ҡайттым:
Үҙ тыуған илемдә
Олтан
Булмаҫҡа булып ҡайттым!

* * *

Яный-көйөүҙәрһеҙ (бер һөйөүһеҙ!)
Бигерәк еңел икән был тормош!
Бер һөйөүһеҙ булғас —
Бер тингә лә
Кәрәк түгел икән был тормош...



05-2001.p65 120 27.07.01, 12:19

* * *

*Предназначенное расставание*
*Обещает встречу впереди...*
*С.Есенин*

«Был донъяның фани икәнлеген
Диуаналар ғына белмәй», ти
Беҙ ҙә мәңге йәшәмәбеҙ, йәнем,
Үләсәкбеҙ,
Нишләп үлмәй ти...

Үләсәкбеҙ!..
Беҙ үлгәнсе әле
Әллә кемдәр килеп китәсәк.
Бутаусылар — бутар:
Йәндәребеҙ
Пара-пара булып бөтәсәк...

Үләсәкбеҙ!..
Беҙ үлгәнсе әле
Президенттар үлеп бөтәсәк.
Улар үлгәс,
Улар вәғәҙә иткән
«Матур тормош» килеп етәсәк!..

«Был донъяның фани икәнлеген
Диуаналар ғына белмәй», ти
«Унда» ла бит осрашыуҙар көтә! —
Шулай булғас —
Нишләп үлмәй ти?!

Үләсәкбеҙ беҙ ҙә:
«Һау бул!» — тиеп
Ҡулбашыңа ҡулым һалырмын...
..Тәрбиәләп оҙат инде —
Ә мин
Һине «унда» ҡаршы алырмын...

* * *

Ҡаршы алам,
Оҙатып ҡалам һине
(Юлдарҙа бит һин, гел юлдарҙа...)
Һин юҡ сакта —
Күңелем Айҙай китек,
Ҡояштарҙай балҡый һин барҙа!

...Ҡаршы алдым —
Оҙатып ҡалдым тағы
(Һаҡлап йөрөт уны, эй Аллам!)
...Яҙмышымдан
Һине һыҙып инем,
Һине һыҙһам — үҙем юғалам...

* * *

*Бер күҙемде*
*Бирәм күҙһеҙгә:*
*Бер күҙ етә миңә — йүнһеҙгә...*
*Fәлимйән Латип*

Бер ҡулымды
Мин ҡулһыҙға бирәм.
Булыр һыңар аяҡ менән дә.
Бер аяҡты
Аяҡһыҙға бирәм —
Йөрөп булыр таяҡ менән дә.

Бер күҙ,
Бер ҡул
Һәм бер аяҡ менән
Йәшәү ауыр булыр — йәшермәм.
...Башым — бирәү,
Башһыҙ нишләрмен мин?! —
Бер кемгә лә шуға баш бирмәм!

**Һуҡыр сыскан**

Бар донъяһы — ер аҫтында:
Тыуған иле, өйө лә.
Ҡараңғыла
Йәшәй сыскан,
Йәшәй һуҡыр көйө лә.

Бәреләһуғыла,
Абына-йығыла,
Донъя ҡыуа-саба ул:
Ашарын, эсәрен —
Барын
Һуҡыр килеш таба ул.

Ҡайғыларға ҡайғыра ул,
Шатлыҡтарға — һөйөнә.
Хәсрәткә лә,
Михнәткә лә
Түҙә һуҡыр көйөнә.

Ер аҫтында бер ни күрмәй,
Тик... хата бар кескенә:
Ҡараңғыла ни күрһен ул? —
Ҡараңғыла
Уға
Күҙҙәр
Кәрәк түгел һис кенә!..

* * *

Ерҙә йәшәү
Ғәләм күҙлегенән
Күҙ асып күҙ йомған аралыр.
...Күҙ асып күҙ йомған
Шул аранан
Кеше
Ғүмер буйы баралыр...

* * *

Ҡулым болғап ҡалдым:
Киттең...
Киттең...
Ҡул болғайһың һин дә — ҡара һин?!
...Эх,
Минме —
Һинһеҙ тороп ҡалдым микән?
Һинме —
Минһеҙ китеп бараһың?..

*Флцзә МЫРҘАБАЕВА*

## Ер-һыуҙарым ерһегәндер инде

Ер-һыуҙарым ерһегәндер инде,
Мин ҡайтмаѓас ошо арала.
Һиндә генә күңелдәге төйөн —
Уй төйөрө шундуҡ тарала.
Табандарым тейгән тупраѓымдан
Быуындарҙы ныѓытыр көс алам.
Тыуѓан йортта йоҡоларым тыныс —
Мендәрҙәргә иҙрәп баш һалам.
Әлдә тимен изге бишек имен,
Һуҡмаҡтарѓа үлән үҫмәгән.
Атайымдың бөтмөр ҡулдарының
Еѓәрҙәре, шөкөр, бөтмәгән.
Йылды нурѓа тулы өйҙөң түре,
Әй унѓан да минең әсәйем.
Бисмиллалап ҡойѓан һөтлө сәйҙең
Тәмен белеп кенә эсәйем…
Биш баҫаһын бер аҙымлап ҡайтам
Нигеҙемдең йәме дауаѓа.
Ер-һыуымда рухым балҡыштары
Зиһенемдә уйҙар ярала.

## Саялыктар биктә

Күкһел тауҙар, күкһел сауҡалыҡтар,
Һеҙме әллә һаѓыш тараҡкан.
Аҡ тынлыкта бер уйланып үттем
Эҙҙәребеҙ ҡалѓан тарафтан.

Мин — мин түгел, болоҡһоу ҙа күңел,
Кем ҡыштарҙан эҙләй йәйҙәрен.
Дыуамал сәм, хәтерҙәрҙе айкап,
Һүтмәк була ѓүмер бәйләмен.

Үткәндәрҙең моңо йөрәк тулы,
Сабырлыктар — кипкән күгүлән.
Кисерәһен баштар кисерелгән,
Күреләһе инде күрелгән.

Тормош бөтөн. Тик йәшәүҙәр ситен,
Күңелдәр бит китек — бир түҙем.
Саялыҡтар биктә, хистәр өтә:
"Ҡайҙа яңылыштым — их, үҙем..."

Аҡ тынлыкта бер моңланып үттем
Эҙҙәребеҙ ҡалѓан тарафтан.
Етенһыу ҙа сәсең, зәңгәр күҙең
Йылдарыма инеп аҙашкан.

## Башкортостан

Башҡортостан — бәгер итем,
Тупраѓыңа ереккәнмен.
Күргән ерҙәр көмөш кенә,
Ә һин алтын ер икәнһең,
Ошо ергә береккәнмен.

Урау юлдар урай-урай
Йөрөлһә лә сит яҡтарҙа,
Һаѓыштарѓа мана-мана
Ҡосаѓыңа тартып ала.

Башҡортостан! Ошо һүҙҙән
Индәремә үҫә ҡанат.
Тәүге тапҡыр талпынѓанмын
Ошо ерҙә таңѓа ҡарап.

Тәүге йырым Башҡортостан
Гүзәллеген данлап тыуѓан.
Һөйөүемдең иң тәүгеһе —
Тыуѓан ергә — уѓа булѓан.

Илем тутәл. Башҡортостан
Шул түтәлдә гүзәл бер гөл.
Һуҡмай ҡырау, һындырмай ел —
Ул сәскәлә һәр бер миҙгел.
Башҡортостан гүзәл бер гөл.

*Әлфиә ӘСӘҘУЛЛИНА*

## Еремә

Йөрәгемдә зыңѓыр бер ҡыл булып,
Тыуѓан яҡка юлым тартылѓан.
Тулҡынланып ауыл ҡырындаѓы
Тау-түмәләс һыртлап артылам.

Анау сәскә миңә ҡулын һона,
Бынау ҡайын килә йүгереп.
Үҙем кеүек нисек һаѓынѓандар,
Бөткәндәрме, тиһәм, төңөлөп.

Ҡалдырҙың да беҙҙе киттең, тиеп,
Үпкәләргә, эйе, һеҙ хаҡлы.
Тик һис ҡасан мин бит онотманым,
Тыуѓан ерем, һинең ҡосаҡты.

Таңдарымда баҡтың ҡояш булып,
Иркәләнең, һөйҙөң еләндәй.
Һиңә булѓан мөхәббәтле йырым
Урѓылмаймы йөрәк түремдән.

Мин ҡайҙа ла һине юҡһынамын,
Гөлкәйендә бешкән бер орлоҡ
Йөрәгемдә үҫеп, сәскә атты,
Сит яҡтарѓа унда урын юҡ.



05-2001.p65 122 27.07.01, 12:19